Муниципальное бюджетное общеобразовательное учреждение средняя общеобразовательная школа с углубленным изучением отдельных предметов № 8 г. Туймазы Муниципального района Туймазинский район Республики Башкортостан

| Рассмотрено на заседании МО протокол № 1 «30» 08 2019 г. | Согласовано Зам. директора по УВР ____ О.А.Ситдикова «30» 08 2019 г. | Утверждаю Директор СОШ №8 ____ Г.П.Соболева «30» 08 2019 г. |
| --- | --- | --- |

# Рабочая программа по родной (башкирской) литературе

## для 1-4 классов

## на 2019-2023 учебные года

(составлена на основе примерных образовательных программ по предмету "Родной (башкирский) язык и литература" для 1-4 классов общеобразовательных организаций с русским языком обучения, составитель З. Г. Нафикова –Уфа: «Китап», 2017 г.)

Ганиевой Зульфии Минулловны,
учителя башкирского языка и литературы
первой квалификационной категории

2019г.

## Аңлатма яҙыу

Башҡортостан Республикаһы Туймазы ҡалаһының 8-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының 1-4-се кластары өсөн туған (башҡорт) әҙәбиәтенән эш программаһы федераль һәм республика закондары, норматив документтарына таянып төҙөлдө:

- Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының 68 статьяһы (п.3) Рәсәй Федерацияһында "…уның бөтә халыҡтарына туған телен һаҡлау, уны өйрәнеүгә һәм үҫтереүгә шарттар тыуҙырыу хоҡуғы" гарантиялай.
- Башҡортостан Республикаһы Конституцияһының 54 статьяһы "Башҡортостан Республикаһы үҙ территорияһында йәшәгән халыҡтарға туған телдәрен һаҡларға тиң хоҡуҡтар гарантиялай, уны ирекле өйрәнергә һәм үҫтерергә мөмкинлектәр тыуҙыра".
- Рәсәй Федерацияһының 2012 йылдың 29 декабренән №273-ФЗ "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" Федераль Законының 14 статьяһына (п.1, 4) ярашлы һәр кемгә мәғариф системаһы биргән мөмкинлектәрҙән сығып туған телендә белем алыу хоҡуғы гарантиялана.
- "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" Рәсәй Федерацияһы Законының 9 статьяһына (п.1-5) ярашлы Рәсәй Федрацияһы граждандары тәрбиә һәм белем алыу телен һайлау хоҡуғына эйә. Ошо уҡ закондың 10 статьяһына ярашлы туған телендә белем алырға теләүселәргә дәүләт һәм мәғариф ойошмалары бөтә шарттар тыуҙырырға бурыслы.
- Башҡортостан Республикаһының 2013 йылдың 1 июленән №696-з "Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында"ғы Законының 6 статьяһына (п.3) ярашлы Башҡортостан Республикаһында һәр кем дәүләт аккредитация үткән мәғариф программалары нигеҙендә Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы туған телендә белем алырға хоҡуҡлы. Бының өсөн дәүләт шаттар тыуҙырырға бурыслы.
- "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" Башҡортостан Республикаһы Законының 8 статьяһына (п.1-5) ярашлы һәр кем тәрбиә һәм белем алыу телен һайлау хоҡуғына эйә. 9 статьяһында (п.1) дәүләттең туған телдәрҙе өйрәнеү өсөн шарттар тыуҙырыу бурысы билдәләнә.
- Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм фән министрлығының 2009 йылдың 6 октябренән №373 бойороғо менән раҫланған Федераль дәүләт белем биреү стандарттарының 19.3 пунктына ярашлы башланғыс дөйөм белем биреүҙә Рәсәй Федерацияһы субъекттарына дәүләт телдәрен өйрәнеү һәм туған телдәрҙә белем биреүҙе ойоштороу мөмкинлеге бирелә.
- Башҡортостан Республикаһы Туймазы ҡалаһының 8-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының «Уҡыу планы».

Башҡортостан Республикаһы Туймазы ҡалаһының 8-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының 1-4-се кластары өсөн "Туған (башҡорт) теле һәм әҙәбиәт"енән эш программаһы федераль һәм республика закондары талаптарына ярашлы, белем йөкмәткеһен заман талаптарына тура килтереп яңыртыу, уның сифатын һәм һөҙөмтәлелеген күтәреү бурыстарын хәл итеү маҡсатында Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған "Туған (башҡорт) тел һәм әҙәбиәт" предметы буйынса белем биреү өлгө программалары/ [авт.-төҙ.:З.Ғ. Нафиҡова]. – Өфө: Китап, 2017) нигеҙендә уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 1-4-се кластары өсөн "Туған (башҡорт) теле һәм әҙәбиәте" дәреслеген ҡулланыуға йүнәлтеп төҙөлдө.

## Уҡыу предметын үҙләштереүҙең шәхсән, метапредмет, предмет өйрәнеүҙең һөҙөмтәләре

**1) шәхси һөҙөмтәләр:**

- башҡорт теленең кешеләр менән аралашыу ҡоралы икәнлегенә төшөнөү;

- башҡорт телен һәм әҙәбиәтен халыҡтың милли ҡомартҡыһы, мәҙәни байлығы итеп ҡабул итеү;

- яҙма һәм һөйләү телмәрен үҙ телендә үҙләштереү кимәле һәр бер кешенең мәҙәни яҡтан үҫешен баһалаусы билдә икәнлеген аңлау;

- үҙенең туған телендә һөйләшеү кимәлен баһалай белеү;

**2) метапредмет һөҙөмтәләр:**

- уҡыу мәсьәләләрен сискәндә туған телдә төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәтте табып, ҡуллана белеү;

- маҡсатына, мәғәнәһенә тап килтереп, аралашыуҙың төрлө ситуатив шарттарын һаҡлап, башҡорт телендә диалог ҡора белеү;

- аралашыу өсөн тейешле һүҙҙәрҙе табып, уларҙан һөйләм төҙөп, һорау бирә, үҙенә ҡарата бирелгән һорауға яуап ҡайтара белеү;

- үҙенең уй-фекерен әңгәмәсеһенә тулыһынса еткерә белергә тырышыу һәләтенең формалаша башлауы;

- һорауҙар бирә һәм бирелгән һорауҙарға яуап ҡайтара белеү оҫталығын үҫтереү;

**3) предмет һөҙөмтәләр:**

- башҡорт әҙәби теленең орфоэпик, лексик, грамматик нормалары тураһында ябай ғына төшөнсәләрҙе үҙләштереү;

- аралашҡанда башҡорт өндәрен һүҙ эсендә, һөйләмдә дөрөҫ әйтә, яҙма телмәрҙә дөрөҫ яҙа белеү;

- үҙ-ара аралашыу ҡағиҙәләрен үҙләштереү;

- орфография һәм пунктуация ҡағиҙәләрен үҙләштереү(программаға ярашлы);

- өйрәнелгән кимәлдә өн, хәреф, һүҙ, һүҙ өлөшө, һөйләм киҫәге, ябай һөйләм кеүек тел берәмектәрен таба, сағыштыра белеү;

- төрлө телмәр эшмәкәрлегендә (тыңлау,һөйләү, уҡыу, яҙыу) үҙ эшен баһаларға, кәрәк булһа, хатаһын төҙәтә белергә күнектерә башлау.

## Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

**I блок.Танышыу.**

**1-3. Һаумыһығыҙ! Хәлдәрең нисек? Ғәфү итегеҙ!**

Бер-береһе һәм уҡытыусы менән танышыу аша яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереү

**II блок. Минең мәктәбем.**

**1-2. Яңы уҡыу йылы менән!**

Яңы һүҙҙәр менән танышыу. Кем? Нимә? Һорауҙарының ҡулланыу осраҡтарын ҡарау.

**3. Бөгөн кем дежур? Класта кем юҡ?** Дәреслектәге һүрәттәр, диалогтар, текстар, шиғырҙар менән эшләү.

**4. Мәктәптә нимә бар?** Уҡыу кәрәк-яраҡтары тураһында һөйләү һәм кескәй диалог, текст төҙөү.

**5.Класта нимә бар?** Дәреслектәге һүрәттәр, диалогтар,текстар,шиғырҙар менән эшләү.

**6-7.Уҡыу кәрәк яраҡтары. Миңә нимә кәрәк?** Был кемдең... ? һорауы. Кәрәк, кәрәкмәй.

**8-9.Һанайыҡ әле. Һиңә нисә йәш?** Һандар, кемгә нисә йәш тураһында һөйләү һәм кескәй диалог, текст төҙөү.
**10-11. Аҙнала нисә көн? Аҙна көндәре**. Аҙна көндәре тураһында һөйләү һәм кескәй диалог, текст төҙөү.
**12-14.Дәрестәр теҙмәһе.Дәрестә.Тәнәфестә**. Дәреслектәге һүрәттәр, диалогтар, текстар, шиғырҙар менән эшләү. Ҡасан була? һорауына яуап биреү.

**III блок. Минең республикам.**

**1.Мин Башҡортостанда йәшәйем.** Башҡортостан тураһында һөйләү һәм кескәй диалог, текст төҙөү.
**2. Мин Өфөлә йәшәйем.** Өфө тураһында һөйләү һәм кескәй диалог,текст төҙөү.
**3. Мин ҡалала йәшәйем.** Ҡала урамдары,ҡатлы йорттар, юл аша сығыу ҡағиҙәләре тураһында һөйләү һәм кескәй диалог, текст төҙөү. Ҡайҙа йәшәйһең? Ҡалала нимә бар? һорауҙары.
**4. Мин ауылда йәшәйем.** Ауыл тормошо тураһында һөйләү һәм кескәй диалог,текст төҙөү.
**5. Өфөлә экскурсияла.** Беҙ ҡайҙа? Был нимә? һорауҙары. Башҡорт һәм рус һүҙҙәрендә баҫым. Өфө ҡалаһындағы ҡала советы, телебашня,Салауат Юлаев һәйкәле, Еңеү паркы тураһында һөйләү һәм кескәй диалог, текст төҙөү.
**6. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек?** Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? Һорауҙарына яуап биреү.

**IV блок. Мин һәм минең ғаиләм.**

**1. Беҙ- татыу ғаилә.** Ғаилә тураһында һөйләү һәм кескәй диалог,текст төҙөү.
**2-3.Кем булып эшләй? Үҫкәс, кем булаһың?** Һөнәрҙәр тураһында **һ**өйләү һәм кескәй диалог, текст төҙөү.
**4. Тән өлөштәре.** Дәреслектәге һүрәттәр, диалогтар,текстар,шиғырҙар менән эшләү.
**5-7. Ҡайһы ерең ауырта? Дауаханала. Дарыуханала.**
Тән өлөштәре, дауахана, дарыухана, һаулыҡ тураһында һөйләү һәм кескәй диалог,текст төҙөү.
**8. Таҙалыҡ-ҙур байлыҡ.** Таҙалыҡ ( гигиена) тураһында һөйләү һәм кескәй диалог,текст төҙөү.
**9-10. Минең көн тәртибем. Мин-ярҙамсы.** Көн тәртибен дөрөҫ үтәү, өй эштәрен башҡарыуҙа ниндәй ярҙам күрһәтеү тураһында һөйләү һәм кескәй диалог,текст төҙөү.
**11-19. Аҙыҡ-түлек. Тәмле-тәмле... Емеш-еләк. Йәшелсәләр. Яратам, яратмайым... Иртәнге аш.Төшкө аш.Базарҙа.Аҙыҡ-түлек магазинында.**
Аҙыҡ-түлек, иртәнге, төшкө аш тураһында һөйләү һәм кескәй диалог,текст төҙөү.
**20-24. Һауыт-һаба. Сәй табыны янында. Нимә менән?Ҡайҙан?Ҡунаҡҡа килегеҙ!**
Аҙыҡ-түлек, иртәнге, төшкө аш тураһында һөйләү һәм кескәй диалог,текст төҙөү.
**25-32. Күлдәгең матур икән! Ниндәй туҡыманан? Магазинда нимәләр һатыла? Һеҙгә нимәне күрһәтергә? Үлсәме ниндәй? Хаҡы күпме? Яңы кейем-яңы шатлыҡ. Ҡасан кейәм?**
Кейем-һалым тураһында һөйләү һәм кескәй диалог,текст төҙөү. Дәреслектәге һүрәттәр, диалогтар,текстар, шиғырҙар менән эшләү.
**33. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек?**
Блок буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау, нығытыу.

**V блок.Мин һәм минең дуҫтарым.**

**1-2. Минең әхирәтем. Минең дуҫым.**
Үҙенең дуҫы,әхирәте тураһында һөйләү һәм һорауҙар ярҙамында кескәй генә диалог,текст төҙөү.
**3-8. Дуҫым Аҡтүш. Йорт хайуандары. Йорт ҡоштары. Минең ҡомағым.Дуҫымдың йәнлектәре.Зоомагазинда.**
Дәреслектәге диалогтарҙы, текстарҙы, шиғырҙарҙы уҡыу, ятлау, тәржемә итеү.
**9-13. Дуҫыма хат. Байрам менән! Байрамдар.Яңы йыл байрамы.Әсәләр –нур сәсәләр.**

Байрамдар тураһында һөйләү, теләктәр теләү. Дәреслектәге диалогтарҙы, текстарҙы, шиғырҙарҙы уҡыу, ятлау, тәржемә итеү.

**14-15.Уйынсыктар. Уйынсыктар магазины.**

Уйынсыҡтар,балалар баҡсаһы тураһында һөйләү. Диалогтар, шиғырҙар уҡыу, йыр өйрәнеү.

**16. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек?**

Блок буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау, нығытыу.

**VI блок. Мине уратып алған донъя.**

**1-6. Беҙҙең фатир. Минең бүлмәм. Светофор тора юлда. Ҡала урамында Йорт алды. Беҙҙең өй.**

Һөйләмдәрҙә тауыш интонацияһы. Ҡайҙа йәшәйһең? Нисә? Ҡайҙа? һорауҙары. Дәреслектәге һүрәттәр, диалогтар,текстар,шиғырҙар менән эшләү.

**7-8. Һауа торошо. Көн ниндәй?**

Һауа торошо тураһында һөйләү, кескәй текст төҙөү.

**9-10. Миҙгелдәр. Яраткан миҙгелем.**

Ҡасан**?** Ниндәй**?** Ҡайһы ваҡыт**?** һорауҙары. Көҙ, ҡыш, яҙ, йәй тураһында һөйләү, кескәй текст төҙөү.

**11-13. Ҡар яуа. Сана шыуабыҙ. Тылсымлы кәштә.**

Ҡыш миҙгеле, балаларҙың ҡышҡы уйындары, ҡышын йәнлектәргә, ҡоштарға ярҙам итеү тураһында һөйләү, кескәй текст төҙөү.

**14-16. Яҙ килә. Баҡсалағы эштәр. Түтәлдә нимә үҫә ?**

Баҡса, баҡсалағы эштәр тураһында һөйләү, кескәй текст төҙөү.

**17-22. Йәмле йәй. Ағастар. Урманда. Үҫемлектәр. Ялан үҫемлектәре.Ҡырағай хайуандар.**

Ағастар, үҫемлектәр тураһында һөйләү, кескәй текст төҙөү. Текстар, шиғырҙар уҡыу, ятлау, тәржемә итеү. Балалар өсөн сыҡҡан газета-журналдарҙан материалдар уҡыу.

**23.Ҡырағай ҡоштар.**

Ҡырағай ҡоштар тураһында һөйләү, кескәй текст төҙөү. Текстар, шиғырҙар уҡыу, ятлау, тәржемә итеү.

**24. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек?** Блок буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау, нығытыу.

Туймазы ҡалаһының 8-се МБДББ мәктәбенең 2019-2020 уҡыу йылының уҡытыу планында аҙнаға һәр класҡа 2 сәғәт, йылына 1-се класта 66, 2-3-сө кластарҙа 68 сәғәт итеп бүленгән, туған (башҡорт) телен өйрәнеүгә 1-се класта - 33, 2-3-сө кластарҙа 34 сәғәт, туған (башҡорт) әҙәбиәтен өйрәнеүгә 1-се класта - 33, 2-3-сө кластарҙа 34 сәғәт ҡаралған.

**Уҡыу йөкләмәһенең бүленеше**

| № | Бүлек исеме | Программа буйынса сәғәттәр һаны | Эш программаһы буйынса сәғәттәр һаны | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | **1** | **2** | **3** | **4** |
| 1. | **Танышыу.** Һаумыһығыҙ! Хәлдәрең нисек? Ғәфү итегеҙ! | **20** | 2 | 4 | 2 | 2 |
| 2. | **Минең мәктәбем.** Был кем? Был нимә? Яңы уҡыу йылы менән! Бөгөн кем дежур? Класта кем юҡ? Мәктәптә нимә бар? Класта нимә бар? Уҡыу кәрәк яраҡтары. Миңә нимә кәрәк? Һанайыҡ әле. Һиңә нисә йәш? Аҙнала нисә көн? Аҙна көндәре. Дәрестәр теҙмәһе. Дәрестә. Тәнәфестә. | **40** | 5 | 5 | 5 | 5 |
| 3. | **Минең республикам .** Мин Башҡортостанда йәшәйем. Мин Өфөлә йәшәйем. Мин ҡалала йәшәйем. Мин ауылда йәшәйем. Өфөлә экскурсияла. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? | **30** | 3 | 3 | 4 | 5 |
| 4. | **Мин һәм минең ғаиләм.** Беҙ-татыу ғаилә.Кем булып эшләй?Үҫкәс,кем булаһың? Тән өлөштәре. Ҡайһы ереҥ ауырта? Дауаханала. Дарыуханала. Таҙалыҡ-ҙур байлыҡ. Минең көн тәртибем. Мин-ярҙамсы. Аҙыҡ-түлек. Тәмле-тәмле... Емеш-еләк. Йәшелсәләр. Яратам, яратмайым... Иртәнге аш.Төшкө аш. Баҙарҙа. Аҙыҡ-түлек магазинында. Һауыт-һаба. Сәй табыны янында. Нимә менән?Кайҙан?Кунаҡка килегеҙ! Күлдәгең матур икән! Ниндәй туҡыманан? Магазинда нимәләр һатыла? Һеҙгә нимәне күрһәтергә? Үлсәме ниндәй? Хаҡы күпме? Яңы кейем-яңы шатлыҡ. Ҡасан кейәм? Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? | **42** | 6 | 5 | 5 | 5 |
| 5. | **Мин һәм минең дуҫтарым.** Минең әхирәтем. Минең дуҫым. Дуҫым Аҡтүш. Йорт хайуандары. Йорт ҡоштары. Минең ҡомағым. Дуҫымдың йәнлектәре. Зоомагазинда. Дуҫыма хат. Байрам менән! Байрамдар. Яңы йыл байрамы. Әсәләр –нур сәсәләр. Уйынсыҡтар. Уйынсыҡтар магазины. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? | **60** | 7 | 7 | 8 | 8 |
| 6. | **Мине уратып алған донъя.** Беҙҙең фатир. Минең бүлмәм. Светофор тора юлда. Ҡала урамында. Йорт алды. Беҙҙең өй. Һауа торошо. Көн ниндәй? Миҙгелдәр. Яраткан миҙгелем. Ҡар яуа. Сана шыуабыҙ. Тылсымлы кәштә. Яҙ килә. Баҡсалағы эштәр. Түтәлдә нимә үҫә ? Йәмле йәй. Ағастар. Урманда. Үҫемлектәр. Ялан үҫемлектәре.Ҡырағай хайуандар. Ҡырағай ҡоштар. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? | **78** | 10 | 10 | 10 | 9 |
| | | **270** | 33 | 34 | 34 | 34 |